мәсьәләләренә заманса ҡарашы менән айырылып торған көүәтле предприятие күп тармаҡлы хужалыҡ комплексын хәтерләтә.

“Ремстройцентр” яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте 2005 йылдан алып төҙәлеш майҙанында үҙ урынын лайыҡлы биләй. Рафаил Исмәғилев етәкселегендәге коллектив, йылдан-йыл юғары күрһәткестәргә өлгәшеп, төбәк иҡтисадын үҫтереүгә тос өлеш индерә. Предприятие үҙен мөһим мәсьәләләрҙе хәл итерлек төҙәлеш ойошмаһы итеп танытты. Эш күләменең 60 процентын Учалы тау-байыҡтырыу комбинатының Сибай филиалы тәьмин итә.

Рафаил Исмәғилев Баймаҡ районының Ниғәмәт ауылында күп балалы ғаиләлә тыуып үҫә. Атаһы Ибраһим Мәғзүм улы ғүмер буйы колхоз идараһында бухгалтер булып эшләй. Бөйөк Ватан һуғышы ветераны. Ауылдың абруйлы кешеһе. Әсәһе Мәһира Әхмәт ҡыҙы изге күңелле, ихтирамлы, кешеләргә ярҙамсыл булып хәтерҙә ҡалған. Ҡызғанысҡа ҡаршы, ул хәҙер мәрхүмә инде. Туғыҙ тиҫтәһен артмаҡлаған Ибраһим Мәғзүм улы бөгөн улының ҡәҙер-хөрмәтендә йәшәй.

Рафаил Ибраһим улы Өфө урман хужалығы техникумын тамамлағандан һуң Учалы урман хужалығында эш башлай. Артабан тыуған ауылындағы Салауат исемендәге колхозда төҙәлеш эштәрен алып бара. Сибай ҡалаһына күскәс, ябай мастер вазифаһынан директор кимәленә үрләй.

– Ҡасандыр Учалы баҡыр-көкөрт комбинаты базаһында барлыҡҡа килгәйнек, – ти Рафаил Ибраһим улы. – Төүҙә комбинаттың төрлө төҙәлеш нөктәләрендә эшләнек, артабан үҙебеҙ айырым йорттар, социаль объ-

эшкәртеү цехы тулыһынса Учалы баҡыр-көкөрт комбинатының Сибайҙағы филиалын таҡта материалдары менән тәьмин итә. Был ойошма менән тығыҙ хеҙмәттәшлек итәбеҙ. Һуңғы ваҡытта авария хәлендәге йорттарҙан күсенеүселәр өсөн өйҙәр төҙөнек. Художество мәктәбен файҙаланыуға тапшырҙыҡ.

“Ремстройцентр” йәмғиәтенең эшселәре үҙ урынында хеҙмәт өлгөһө күрһәтә. Рафаил Ибраһим улы алдынғы хеҙмәткәрҙәрен маҡтап телгә алды: В. Ҡорманов, Д. Мырҙагилдин, В. Крюков, Х. Сынғыҙов, Г. Фазлыева, Ю. Сәйетова, Ш. Рәхмәтуллина, Р. Дәүләтов. Улар барыһы ла тырыш хеҙмәте өсөн Сибай ҡалаһы хакимиәте тарафынан маҡтау грамоталары менән бүләкләнгән. Үҙ-ара йылы мөнәсәбәт, яҡшы аңлашыусанлыҡ, коллективтағы берҙәмлек йәшәй бында. Шулай булмай ни, үҙ эшен яҡшы белгән һөнәр эйәләре тупланған уларҙа. Йәмғеһе 198 кеше эшләй. Ғөмүмән, Сибай ҡалаһының төҙөүсеһе” тигән маҡтаулы исем бирелде.

Рафаил Ибраһим улы йәмәғәт эштәрендә лә әүҙем ҡатнаша. Сибай ҡала Советы депутаты булараҡ ҡала халҡының көнитмеше менән даими ҡыҙыҡһына. Мәҙәни, спорт сараларынан ситтә ҡалмай, даими бағыусы булараҡ та беләләр уны. Шәхси тормошонда ла бәхетле замандашыбыҙ. Ҡатыны Айгөл менән мөхәббәт емештәрен – ике улдарын үҫтерҙеләр. Өлкән улдары Динар Өфө дәүләт нефть техник университетын ҡыҙыл дипломға тамамлап, бөгөнгө көндә “Транснефть-Өфө” ойошмаһында уңышлы эшләп йөрөһә, кеселәре Руслан шул уҡ уҡыу йортонда яҡшы билдәләргә генә өлгәшә.

Абруйлы һәм көүәтле “Ремстройцентр” ойошмаһының алтын ҡуллы төҙөүселәре киләсәктә лә матур йорттар, күркәм биналар менән халыҡҡа шатлыҡ, ҡыуаныстар ғына килтерһен.

Г. ОМОРҘАҠОВА.

Ҡулдағы сәпсек яҡшыраҡ

Рәсәйҙең Монополияға ҡаршы дәүләт комитеты мәғлүмәттәре буйынса, дәүләт компаниялары ил иҡтисадының 70 процентын үҙ ҡулында тота. Дәүләт милкен хосусилаштырыу планы 2010 – 2015 йылдарҙа ни бары 20 процентҡа үтәлеп, федераль ҡаҙнаға 260 миллиард һум ингән. Дәүләттең 60 меңләп активы бар, ҡаҙнаның да объекттары шул сама, тип хәбәр итә “Ведомости” гәзите.

Был тикләм байлыҡҡа һөҙөмтәле идара итеү мөмкин түгел. Иҡтисадта дәүләт – насар менеджер, ти белгестәр. Тармаҡта дәүләттең өҫтөнлөк итеүе башҡа секторҙарҙың үҫешенә ҡамасаулап, дөйөм алғанда баҙар иҡтисады мөнәсәбәттәренең камиллашыуына өтди аяҡ сала. Дәүләт үҙ объекттарын аҫрарға сығымдарҙы күберәк тотонорға мәжбүр. 2015 йылда ғына устав фондтарына иғәнәләргә һәм унитар предприятиеларға субсидиялар тәртибендә 67,5 миллиард һум йүнәлтеүгә ҡарамаҫтан, дивидендтарҙы биш тапҡыр кәмерәк алған. Илдә 346 дәүләт унитар предприятиеһы юҡҡа сығыу алдында, 286-һы финанс эшмәкәрлеге менән бөтөнләй шөғөлләнмәй.

Ҡаҙнаға табышты тик 12 компания ғына килтерә. Ғөмүмән, был субъекттарҙың күпселегендә ҡарарҙар тар даирәләрҙә ҡабул ителә, премияларҙы күпләп түләү киң таралған, эшмәкәрлек тураһында хәбәр йәшерелә. Дәүләткә кәрәге булмаған милекте һатыу зарурлығы эксперттар тарафынан йыш телгә алына. Алдағы өс йылда ла дәүләт ҡаҙнаһының сығымдары килемдәрҙән күпкә ҡайтыш булыуы менән бәйле дәүләт милкен хосусилаштырыу – ҡаҙнаны тулыландырыу йәһәтенән иң һөҙөмтәле алым, ти белгестәр. Әйткәндәй, Рәсәй Иҡтисади үҫеш министрлығы тарафынан хосуси ҡулдарға тапшырыу буйынса әҙерләнгән исемлектә күпселекте Федерация субъекттарының һәм урындағы үҙидараның түбән капитализациялы объекттары биләп тора.

Ҡаҙна ҡытлығын бөтөрөү өсөн милекте хосусилаштырыуҙы ҡыҙыулатһаҡ, ти “Росимущество” вәкилдәре, 3–5 йылдан дәүләттең үҙ милке ҡалмаясаҡ һәм уны эшҡыуарҙарҙан ҡуртымға алырға тура киләсәк. Башҡа сиселештәр ҙә бар. Мәҫәлән, Юғары иҡтисад мәктәбе профессоры Светлана Авдашева раҫлауынса, хосусилаштырыу тармаҡта хәлде һауыҡтырыуҙың берҙән-бер юлы түгел. Мәҫәлән, дәүләт милкен ҡуртымға, концессияға бирергә мөмкин.

Һауалағы торнаға ышанып, ҡулдағы сәпсекте ысҡындырмауҙы хуп күрә халыҡ. Етештереү тармаҡтарының күпселегенең дәүләт ҡулында тупланыуының етди сәбәптәре бар, һәм уның нигеҙендә донъя тарихында осрамаған социализмдан һуңғы етештереү-бүлеү мөнәсәбәттәре ята. Дәүләт, насар менеджер булыуға ҡарамаҫтан, социаль йөкләмәләрен үтәүҙән баш тарта алмай, ә бына хосуси милексенең ундай йөкләмәһе юҡ.

М. МӨХӘМӘТШИН.

– Ә һеҙ бит бөтәгеҙ ҙә ошо “с
һуғыу” мәҙәниәтен үҫтерәһегеҙ
башҡалар көйөк ҡыланаһығыҙ,
башҡалар ҙа – һеҙҙең һымаҡ. Һеҙ
бөтәһе лә һуға. Кемдер шуның арҡ
кемделәр үлтерә, ә кемдер, өйҙә би
үҙен бетерә. Бында берәй айырма
һуң? Ошо мәҙәнилекте үҫтереүсе
Әгәр ҙә мөхит икенсе төрлө булһа,
ҡунаҡта үҙеңде таба менән һуғыу т
башҡа төрлө ҡыланыу ғәҙәти күренеш
һеҙ ҙә шуны ҡабатлар инегеҙме? М
күҙ алдына килтерегеҙ, бөтәһе лә ал
эсә икән, ти.
– Ниндәй туҙға яҙмаған хәбәр һөйлә
Ниндәй алйот үҙенә ағыу ҡойоп ылт
ти. Аҡылға һыймай!
– Күрәһеңме, мәҙәнилек хәл итә
йүнләрлек, ә нимә ғәҙәти күренеш.
үҙаллы фекерләп ҡараһың? Шунд
нимә файҙалы, нимә зарарлы икәнен
башлаһың.
– Нимә бында уйлап сығарып
ултыраһың? Мин былай ҙа үҙаллы хә
Теләйем – һуғам, теләмәйем и
һуҡмайым.
– Ә һин уйламайһыңмы был кеслек
тағылған ғәҙәт тип? Халыҡ бит һуғыу
йәшәй алыр ине, тик нишләптер ошо
мәҙәниәте” әүҙем үҫтерелә. Фильм
сериалдарҙа геройҙар, тамашасыл
дында кәрәкле образ тыуҙырып, м
рәүештә һуғырға тейеш. Инт
селтәрендә “ғалимдар ҡыҙыл таба
кенәнә бер-ике һуғыу һаулыҡ өсөн фа
икәнен иҫбатлаған” тигән яҙ
баҫтырыла, ә һуңынан инде беҙ нисек
арҡаһында кемдер кемделәр та
үлтергән, туҡмаған, көсләгән, талаған
һәм башҡа хәбәрҙәр уҡыйбыҙ. Һеҙг
сәйер тойолмаймы?
Шул ваҡытта ҡунаҡтар ризаһ
белдерҙе:
– Һин ниндәйҙер сәйер кеше.
– Кешенең кәйефен боҙоп ултырма
да.
– Һин артыҡ күп уйлайһың.
Ултырам бына уйланып. Нимәһ
дөрөҫ түгел?..

Гөлдәр БУЛӘКБА